Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение

средняя общеобразовательная школа с.1-е Туркменево

Баймакского района Республики Башкортостан

Утверждаю

Директор школы: ________ /Кагарманова З.С./

Приказ № 95 от "27" 05 2024 г.

# Программа

# летнего оздоровительного лагеря дневного пребывания

# АРҒЫМАҠ

# АРҒЫМАҠ

**(Төркмән урта мәктәбе янындағы йәйге ял һәм һауыҡтырыу лагеры өсөн төҙөлгән программа)**

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Аңлатма яҙыу

Программаның маҡсаттары һәм бурыстары

Программаның йөкмәткеһе

Программаны тормошҡа ашырыу шарттары

Әүҙем ял ойоштороу

Үҙидара эшен ойоштороу

Балаларҙың ялын ойоштороуҙы мәрәйҙәр менән баһалау

Программаға ҡушымта

| | |
|---|---|
| Программаның тулы атамаһы | “Арғымаҡ” (Төркмән урта мәктәбе янындағы йәйге ял һәм һауыҡтырыу лагеры) |
| Юридик адресы | Башҡортостан Республикаһы, Баймаҡ районы, 1-се Төркмән ауылы Мәктәп урамы. 4 |
| Программаның маҡсаты һәм бурыстары | Баланың тәбиғи һәләтен асыу маҡсатында туған тел мөхите булдырыу, һәр яҡлап үҫешенә йүнәлеш биреү өсөн шарттар тыуҙырыу, сәләмәтлеген нығытыу өсөн – балалар уйындары, спорт ярыштары үткәреү, сәйәхәттәргә алып сығыу, туған телдә йырҙар башҡарыу, ырыу тарихы аша үҙ халҡының тарихын өйрәнеү, ауылдың ер-һыу атамаларына ҡарата ижад ителгән легендаларҙы өйрәнеү аша үҙ төбәге тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, халыҡ шәхестәренең, күренекле әһелдәренең тормош һәм ижад юлын өйрәнеү маҡсатында улар исеменә конкурстар үткәреү, ҡыҫҡа ваҡытҡа сәйәхәттәргә алып сығып, тирә-яҡтың үҫемлектәре, ҡош-ҡорто, йәнлек-хайуандары менән таныштырыу һәм туған телдә уларҙың атамаларын өйрәтеү, балаларҙы сәхнәгә сығарыу, йырлатыу һәм бейетеү.<br>Бурыстар:<br>баланың ҡанына һалынған һәләтен асыу;<br>балала тыуған төбәккә, тәбиғәткә, илгә ҡарата һөйөү уятыу, тәбиғәтте һаҡлау зарурлығын аңлатыу,<br>бейей һәм йырлай белеүҙең рухи сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу,<br>саф һауала, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир яһарлыҡ шарттарҙа баланың физик һәм рухи ҡиммәттәрен үҫтереүгә, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнергә йүнәлеш биреү;<br>баланы үҙе өсөн генә түгел, коллектив (“Арғымаҡ”та ырыу) өсөн дә, артабан мәктәп, уҡыған һәм эшләгән коллективы өсөн дә йәшәргә, борсолорға, уның мәнфәғәтен күҙәтергә өйрәтеү;<br>буш ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға, ялды ойоштора белергә, беренсел мөһим бурысты үтә мөһим булмағандарынан айырып өйрәтеү; |

| | |
|---|---|
| | бер генә минутты ла бушҡа үткәрмәй, файҙалы маҡсаттарға йүнәлтеп өйрәнеү күнекмәһе булдырыу, баланы үҙ-ара мөғәмәлә итеү, бәхәсләшеү, тапҡыр һәм дөрөҫ яуап биреү күнекмәһе тәрбиәләү;<br>баланың күңел донъяһына ыңғай тәьҫир итеү; башҡаларҙы аңлау өсөн, үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарарға өйрәтеү. |
| Программаның төп эш йүнәлештәре | Программала аҙ ваҡыт эсендә бик күп бурысты тормошҡа ашырыу маҡсаты билдәләнгән, шуның өсөн төрлө йүнәлештәр ҡаралған:<br>рухи-әхлаҡи тәрбиә;<br>спорт-һауыҡтырыу;<br>ижади эшмәкәрлек;<br>илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү;<br>мәҙәни-тарихи белем биреү һәм ғәмәли башҡарыу. |
| Үтәлеү ваҡыты | 31.05.2024- 20.06.2024 |
| Программала ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны | 60 бала, 13 тәрбиәсе һәм вожатыйҙар |
| Көтөләсәк һөҙөмтәләр | Рухи сәләмәтлек тәрбиәләү өсөн үҙ халҡыңдың быуаттарҙан-быуаттарға һынала, камиллаша, күсә килгән рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү;<br>республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының һәм быуаттар элек был ерҙәргә күсеп ултырған башҡа милләт вәкилдәренең тарихы, традицияһы тураһында мәғлүмәт алыу, ихтирамлы мөнәсәбәт нигеҙендә интернациональ, толерантлыҡ тойғоһо тәрбиәләү маҡсатында һәр балала иң элек үҙ туған теленә, халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләү |

## Аңлатмалы яҙыу һәм программаның актуаллеге

“Арғымаҡ”тың төп маҡсаты – балаларҙы физик һәм рухи яҡтан сыныҡтырыу, уҡыусының һәр яҡлап һәләтен асыу өсөн йүнәлеш биреү, артабан үҙ тәрбиә менән шөғөлләнеүгә нигеҙ һалыу, бала булмышында, аңында Тәбиғәттән бирелгән, быуындан-быуынға күсә килгән һәләтен уятыу. Ә бындай тәрбиә биреү баланың тәбиғи һәләтен асыуҙа иң беренсе урында туған тел, халыҡ педагогикаһы торорға тейеш.

Бөтөн халыҡтар ҙа үҙ киләсәген үҙ тәжрибәһендә тупланған халыҡ педагогикаһы нигеҙендә тәрбиәләгән. Халыҡсанлыҡ принциптары төп урында торорға, тәрбиә эшенең нигеҙен тәшкил итергә тейеш. Халыҡ педагогикаһы – ул ҡағиҙәләр түгел. Халыҡ педагогикаһы һәр халыҡтың тарихы, традициялары, йолалары, мәҙәниәте, сәнғәте, ижады аша алып барылған тәрбиә. Ошо нигеҙҙә ил һөйәрлек тәрбиәләнә. Илһөйәрлек – ул үҙ милләтеңде, үҙең йәшәгән төбәкте генә түгел, ә уларға булған һөйөү аша бөтөн халыҡтарға, бөтөн илдәргә ҡарата ла йылы мөнәсәбәт тыуҙырыу тигән һүҙ.

Халыҡ тарихы, уның тәжрибәһе, әхлаҡи һәм эстетик хыялы, уның Ватанға булған һөйөүе, уй-хыялдары һәм киләсәккә өмөтө, әйтәһе фекере туған тел ҡиммәттәрендә һаҡлана һәм фәҡәт туған тел аша бала күңеленә юл ярып була. Шуның өсөн әле кешелек донъяһында китаптар ҙа, мәктәптәр ҙә булмаған замандарҙа уҡ балала рухи ҡиммәттәр тәрбиәләнгән. Әммә, халыҡтың прогрессив традицияларын файҙаланып, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә булһа ла “Арғымаҡ” лагеры программаһы нигеҙендә ошо бушлыҡты тултырырға мөмкинселек бар.

Һәр хәлдә халыҡ традицияларының иң һәйбәт өлгөләре нигеҙендә бала күңеленә тәбиғәттән һалынған рухи ҡиммәттәрҙе уятып ебәреү өсөн йүнәлеш биреп була. Был программа нигеҙендә рухи байлыҡҡа ҡарата һөйөү уятыла, артабан тормошта ошо йүнәлештә үҙтәрбиә менән шөғөлләнерлек йүнәлеш бирелә. Был - заман талабы, сөнки донъяла барған кире күренештәр бала күңеленә юл яра, аңын томалай.

Туған телде өйрәнеү, байытыу, халҡыбыҙ фәлсәфәһен аңларлыҡ кимәлгә еткереү, бала күңелендә иң элек туған халҡына, уның теленә, ижадына, тарихына һөйөү орлоғо сәсеүҙән башлана. Был маҡсатты иһә беҙ аҙ ғына ваҡыт эсендә (өс аҙна) төрлө юлдар, төрлө ысулдар, төрлө алымдар менән тейешле мөхит солғанышында тормошҡа ашырабыҙ. Ә аңына ыңғай яҡтан тәьҫир итеү, сәләмәт тормош алып барыуҙың мөһимлеген аңлатыу, коллективта үҙеңде тотоу, һыйышып тыныс йәшәү принциптарына, сәмле

ярыш, бәхәс алымдарына өйрәтеү һәр үткәрелгән сарала төп маҡсаттарҙың береһе итеп ҡуйыла.

Ырыуҙарға бүленеү шартлы рәүештә булһа ла, балалар, тәғәйен ырыуҙарҙан тупланып, ырыу тарихын, шәхестәрен, боронғо шөғөлөн өйрәнеп, дөйөм халыҡтың рухи һәм матди ҡиммәттәрен өйрәнәсәк.

Ял итеүселәрҙең йәше 6-14 араһы. “Арғымаҡ” отрядтарға түгел, ырыуҙарға бүленеп эшләй. Ырыуҙар төрлө йәштәге балаларҙан туплана.

Программаны эшләгәндә, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының белем биреү, балалар хоҡуғын яҡлау, хеҙмәт кодексы, хеҙмәт һәм ял итеүгә ҡағылған бөтә Законд ар һәм норматив-хоҡуҡи документтар иҫәпкә алынды.

## “Арғымаҡ”тың маҡсаты һәм бурыстары

Төп маҡсат – туған телдә телмәр байлығын үҫтереү, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын, йолаларын, балалар уйындарын, ижадын, спорт төрҙәрен өйрәнеү, музыка ҡоралдарында уйнап, ырыу легендаларын өйрәнеү, халҡыбыҙ шәхестәре, сәнғәт әһелдәре менән танышыу.

Бурыстар:

баланың ҡанына һалынған һәләтен асыу;

балала туған төбәккә, тәбиғәткә, илгә ҡарата һөйөү уятыу, тәбиғәтте һаҡлау зарурлығын аңлатыу;

бейей һәм йырлай белеүҙең рухи сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу һәм бейергә өйрәтеү;

саф һауала, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир яһарлыҡ шарттарҙа баланың физик һәм рухи ҡиммәттәрен үҫтереүгә, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнергә йүнәлеш биреү;

баланы үҙе өсөн генә түгел, коллектив (“Арғымаҡ”та ырыу) өсөн дә, артабан мәктәп, уҡыған һәм эшләгән коллективы өсөн дә йәшәргә, борсолорға, уның мәнфәғәтен күҙәтергә өйрәтеү;

буш ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға, алды ойоштора белергә, беренсел мөһим бурысты үтә мөһим булмағандарынан айырып өйрәте1;

бер генә минутты ла бушҡа үткәрмәй, файҙалы маҡсаттарға йүнәлтеп өйрәнеү күнекмәһе булдырыу, баланы үҙ-ара мөғәмәлә итеү, бәхәсләшеү, тапҡыр һәм дөрөҫ яуап биреү күнекмәһе тәрбиәләү;

баланың күңел донъяһына ыңғай тәьҫир итеү; башҡаларҙы аңлау өсөн, үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарарға өйрәтеү,

халҡыбыҙ булмышын, йәшәйешен өйрәнеү;

баланың ни менән ҡыҙыҡһыныуын күҙәтеү, өйрәнеү һәм, йүнәлеше биреү;

шифалы үҫемлектәрҙе танырға, йыйырға, һаҡларға, ҡулланырға өйрәтеү;

үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең, хайуандарҙың, башҡортса атамаларын өйрәтеү, атамалар менән бәйле һынамыштар, әйтемдәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү;

Эш йүнәлештәре:

лекциялар;

милли, мәғәнәле, маҡсатлы, сюжетлы уйындар;

иҫтәлекле урындарға сәйәхәттәр;

әңгәмәлә ҡатнашыу, һорау биреү, бәхәс ҡороу нескәлектәрен үҙләштереү;

Өлгәшеләсәк һөҙөмтәләр

Ял һәм һауыҡтырыу лагерының маҡсаттарынан һәм бурыстарынан сығып, тәрбиәселәр һәм әйҙәүселәргә ауыл тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, ижадын яҡшы белеү; йыр-бейеүгә маһир булыу, берәй музыка ҡоралында уйнай белеү кеүек талаптар ҡуйыла. Рухи сәләмәтлек тәрбиәләү өсөн үҙ халҡыңдың быуаттарҙан-быуаттарға һынала, камиллаша, күсә килгән рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү тормошҡа ашырыла.

Республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының һәм быуаттар элек был ерҙәргә күсеп ултырған башҡа милләт вәкилдәренең тарихы, традицияһы тураһында мәғлүмәт алыу, ихтирамлы мөнәсәбәт нигеҙендә илһөйәрлек, интернациональ, толерантлыҡ тойғоһо тәрбиәләү маҡсатында һәр балала иң элек үҙ туған теленә, халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләнә.

## Программаның йөкмәткеһе

*Көн тәртибе*

“Арғымаҡ” ял һәм һауыҡтырыу лагерының көн тәртибе тәғәйен урынлашҡан төбәктең тәбиғәт торошона, сменаның ниндәй миҙгелгә тап килеүенә ҡарап үҙгәреүе ихтимал.

1. Йыйылыу
2. Иртәнге күнекмәләр.
3. Йыуыныу.
4. Иртәнге аш.
5. Конкурстарға әҙерләнеү. Спорт уйындары һәм ярыштары.
6. Ял өсөн ваҡыт (Үҙең теләгән эш менән шөғөлләнеү)
7. Конкурстар.
8. Төшкө аш.
9. Осрашыуҙар, әңгәмәләр, түңәрәк эштәре.
10. Ырыуҙар сығышы, төрлө уйындар
11. Көндәлек эшкә йомғаҡ яһау.

***“Арғымаҡ” ял һәм һауыктырыу лагерының көндәлек эштәре.***

1-се көн.

Ял итергә килеүсе балаларҙы ҡабул итеү. Ырыуҙарға бүлеү.

Артабан балаларҙың йәшенә ҡарап башҡа ырыуҙарға бүленәләр. Ырыуҙар, лагерь мөмкинлегенән, нисә тәрбиәсе һәм әйҙәүсе булыуынан сығып, өс ырыуға бүленә. Тамъян, ҡыпсаҡ, бөрйән исеме һайлап алып ҡушыла.

Ырыуҙар үҙҙәренә тәғәйен бүлмәләргә урынлаша. Әйҙәүселәр уларҙы лагерҙағы бүлмәләр, майҙан, ашхана, ял итеү урыны һәм ял тәртибе менән таныштырып сыға.

*“Арғымаҡ”тың үҙенсәлеге:*

а) һәр бала бөтөн сараларҙа ла мотлаҡ ҡатнашырға тейеш;

б) сараларҙа ҡатнашҡан өсөн бер мәрәй бирелә,

в) сараларҙа ҡатнашып, ниндәйҙер баһаларға өлгәшһә, бәләкәй бүләктәр бирелә.

г) әйҙәүсе һәр балаға “Арғымаҡ” гимны тип ҡабул ителгән “Башҡортостан” йыры (Дамир Әҙелбаев һүҙҙәре һәм көйө) һүҙҙәрен таратып бирә.

д) ҙур ватман ҡағыҙға ырыу атрибуттары һәм күмәкләшеп һайлап алынған ырыу йыры, ырыу девизы яҙып эленә. Ырыу башы һайлана.

2-се көн.

Был көнө  сменаны асыуға әҙерлек бара.

Ырыуҙарҙа әҙерлек. Ырыу башы етәкселегендә атрибут әйтеп өйрәнәләр, девиз, йыр ҡабатлайҙар.

3-сө көн.

“Арғымаҡ”ты асыу.

Асыу тантанаһы үткәреләсәк урынға тирмә ҡорола, ә майҙан тирмә рәүешендәрәк түңәрәк була. Ырыуҙар линейкаға теҙелеп тормай, майҙандың тирә-яғынан урын ала, Йәйләү асылғандан һуң ултыралар. Ә ҡунаҡтар өсөн махсус урын әҙерләнә. Ултырыу өсөн лагерь етәкселеге менән килешеп түшәр әйбер алырға кәрәк. Ҙур сәхнә түре  башҡортсалап биҙәлә. Сәхнә тирәләй ырыуҙарҙың гәзиттәре эленә.

Тантаналы асыу тураһында фекер алышҡандан һуң, ял итеү программаһының төп саралары һәм мотлаҡ үтәлергә тейешле шарттар тураһында һөйләшеү үткәрелә. Был эште һәр ырыуҙың үҙ тәрбиәсеһе алып бара.

4- се көн.

“ Һаумы, һаумы, әкиәт!”.

Әкиттәр иленә сәйәхәт. Һүрәттәр күргәҙмәһе. Фольклор нимә ул? Кем ул сәсән? Әкиәттәрҙе кем ижад итә?

Балалар үҙҙәре әкиәт һайлап алып сәхнәләштерә.

5-се көн.

Балалар һабантуйы.

Милли уйындар уйнатыу.Халҡыбыҙҙың йололарын өйрәнеү һәм тергеҙеү.йыр һәм бейеү бәйгеһе.

6-сы көн.

Йүгеректәр көнө

Ырыу менән ырыу ярышы.

7-се көн.

Бейеү. Йыр. Ҡурайҙа уйнап өйрәнеү.
Илшат Абдуллин исемендәге призға йырсылар ярышы. Йырсы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирергә. Данлыҡлы йырсыларҙан кемдәрҙе белеүҙәре тураһында һорауҙар биреү. “Юғалған мәҡәлдәр” кисәһе.

8-се көн.

Рус теле көнө. Бөйөк рус яҙыусыларының әҫәрҙәре менән танышыу.Викторина. Әкиәттәр сәхнәләштереү.

9-сы көн.

«Ҡыпсаҡ» ырыуында ҡунаҡта. Йыр – бейеү, уйын – көлкө, милли уйындар.

10-сы көн.

« Юл ҡағиҙәләре һәм беҙ».Юл ҡағиҙәләрен өйрәнеү. ЮИД отрядтарының сығышы.Кинофильмдар ҡарау.

11-се көн.

Туғажман тауындағы Ҡурай һәйкәленә сәйәхәт..
Ирәндек зонаһындағы данлыҡлы ҡурайсылар тураһында мәғлүмәт.Ҡурай һәйкәленең барлыҡка килеү тарихы менән танышыу..
Башҡорт халыҡ уйындары.

12-се көн.

Тамъян ырыуында ҡунаҡта. Ырыу башлығы һүҙ һөйләй.

Милли уйындар. Йыр – бейеү, уйын – көлкө.

13-сө көн.

“Йәйләү” һылыуы. Үҙең менән таныштырыу, һөнәр күрһәтеү, төрлө көйгә бейеү, сәс прическаһы, кейем өлгөһө күрһәтеү, ҡыҫҡа һорауҙар - ҡыҫҡа яуаптар.

14-се көн.

Ырыуҙар концерты  һәм милли уйындар. Таҡмаҡсылар ярышы. Спорт уйындары.

15-се көн.

“Бөрйән”  ырыуында ҡунаҡта. Ырыу башлығы һөйләй.Йыр – бейеү, уйын – көлкө, милли уйындар.

16-сы көн.

“Урал батыр” эпосы буйынса “Туған телеңде беләһеңме?” кисәһе. Милли уйындар.

17-се көн.

18-се көн.

Төркмән ауылындағы Ғата Сөләймәнов исемендәге Тыуған яҡты өрәнеү музейына сәйәхәт. Экспонаттар, ауылдың данлыҡлы шәхестәре менән танышыу.Рәссам Михәт Байрамғоловтың ижадына байҡау яһау.

19-сы көн.

“Ырыу”батыры һәм «Ырыу»һылыуы. Ярыш төрҙәре балаларҙың әҙерлегенә, тәбиғәт шарттарына ҡарап һайлана. Мотлаҡ булғандары: үҙең менән таныштырыу,малайҙарға уҡ атыш, һөнәр күрһәтеү, төрлө көйгә бейеү, ҡыҫҡа һорауҙарға ҡыҫҡа яуаптар.

20-се көн.

«Алло, беҙ талантлар эҙләйбеҙ».Йыр, бейеү һәм башҡа төрлө һөнәрҙәрҙе асыҡлау.

21-се көн.

“Арғымаҡ”ты ябыу.

***ҠУШЫМТА***

I. “Урал батыр” эпосы буйынса конкурсҡа һорауҙар

Туған телеңде беләһеңме? (Һорауҙар балаларҙың әҙерлегенә ҡарап һайлап алына һәм алдан уҡ таратыла).

**1.** Ҡаҙан аҫып, ҡамыр баҫып,
Улар донъя көтмәгән.
2. Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы…
3. Үҙ иштәре яһаған…
**4.** Бик борондан булғанмы
Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы…
**1.** Йәнлек иркәк булды ниһә…
**2.** Үлән емшәр йән тотһа…
**3.** Маҙаһына тейгән һуң…
8. Әле арыҫлан менергә…
Миҙгелегеҙ етмәгән.
9. Сыйырсыҡтың тубына
Яғылбайҙы сөйөгөҙ.
10. Йәнде ҡыйып һунарлау
Ҡомарлы эш булмаһа…
11.Төндә йоҡлап ятҡанда -
Арыҫлан, болан, ҡапланы…
12.Эт һөслөтеп йәнлеккә…
13. Йомранына – көҙәне…
14. Үлемдән ҡурҡып ялдымға…
15. Ҡанды һемереп эскән , ти…
16. Ҡулындағы һуйылға
Күҙ йүгертеп ҡарасы...
17. Ас зарыҡҡан арыҫланың
Бәйҙә тороп ужарып...
18.Төндә йөрөп йәшелдең
Барыһын да утлаһа…
19. Барыбер аш булмамын,
Һис аш булып һеңмәмен…
20. Балалары ҡурҡышып,
Ымлап ҡына һөйләшеп...
21. Мине тиңгә алманың,
Кире ҡаҡтың һүҙемде.
22.Тора-бара йыландың
Һис тәҡәте ҡалмаған.

23. Ун ике тарбаҡ мөгөҙлө
Болан табып ей тине.
24. Ут һөрөмө ҡаплаған.
25. Осораған бер күлгә
Ситен ҡуға ураткан,
Томбойоҡтар япрайып,
Тик ағастай сәскә атҡан,
Һаҙмыт түгел, ҡырсынтөп…
26. Арыҫлан ҡылыны алып,
Мәскәү яһамаҡ булған.
27. Хур ҡунаҡтан йүпәтләп
Бер ҙур дейеү килгән, ти.
28. Ҡош туптары барыһы…
29. Күс башлығы инәләй…
30.Тирә-яҡты һәрмәгәс,
Берен-бере тапмағас...
31.Ҡан көҫәгән, йәш түккән,
32.Ҡотҡарырға кешене,
Тындырырға барыны…
33. Йөҙөн һис тут алмаҫтай,
Һис берәү кәр ҡылмаҫтай.
34.Ҡаты елгә борсолмай,
Шаҙраланып өҫтәре…
35. Бында килеп сығырға
Ни бәләгә тарыҡтың?
36. Муйынына ырмау һалғанда,
Йәнең алҡымға килгәндә…
37. Күләгәләй йөрөрҙәр,
Баҫмалатып килерҙәр
38. Ултырғанда Шүлгәндең
Һытыҡ йөҙөн күргәнгә...
39. Ауыҙлыҡ сәйнәп, ярһыуҙан
Ауыҙҙарын күпсетер
40. Шүлгән барып уҡталған,
41. Барыһы күккә баҡҡан, ти…
42. Һыңар ҡулын һуҙған ти.
/Нindәй осраҡта *бер*, ә ҡайһы осраҡта *һыңар* тип әйтәләр?/
43.Ҡайтып килгән сағында,
Ялҡын сырмап алған ти.
44.Ташты буйға атҡанын
Йәнә күрҙем төштә мин.
Ул таш диңгеҙ ашаға
Сорғап ките йыраҡҡа.
45. Һомай белгәс, һиҫкәнгән…
46. Ҙур бер балыҡ булған да,

Янына барған Һомайҙы
Шул урында ҡарпыған.
47. Ҡайыҡ яһап бар кеше
Һыуға батып үлмәгән.
48. Һыу алмаҫлыҡ юл булып,
Ҙур тау ҡалҡа барған ти.
49.Ҡоҙғон эсмәй, ер йотмай,
Күпсеп ята ҡanығыҙ.
50. Бер талай көн уҙғас та
Ҡоҙғоно килде шау менән.
51. Билем биштән быуҙым мин,
Һинең юлды ҡыуҙым мин.
52. Унан этлек күрһәгеҙ…
53. Дейеүгә юл ҡуйманым,
Тубарлата башланым.
54. Иҙел тигән улың мин,
Һиңә төбәп килдем мин.
55. Утҡа өтмәксе булған,
Башына етмәксе булған.
56. Һыуһыҙ ҡалып дейеүҙәр,
Кәрек итеп хур булған.
57. Яуызлығың ат иттең,
Атам йөҙөн ят иттең,
Әсәм һөтөн ыу иттең…
58. Яҡшылыҡтан күҙ йомдоң,
Ҡан ҡойорға ынтылдың.
59. Кеше һине ишкә алмаҫ,
Кешегә асыу тарҡыған
60. Һыбай йөрөгән арыҫланым
Ике һөрөнөп абынды…
61. Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек.
62. Йәнем бирмәй серәштем…
63. Бер йотомдай ҡаным бар,
Елберәгән тәнем бар
Һөйәк-һаяҡ ҡыйралған
Тик тарҡалмаҫ һыным бар.
64.Үлем саҡырып ҡараным,
Буй бирергә уйланым.

65. Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән.
66. Ил бәхете ине, тип,
Бары һыҡтап илаған.
67. Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
Хараплыҡҡа төшмәгеҙ.
68. Еҫерҙәрҙең алдында
Күҙенә керпек булығыҙ.
69. Менәренә ат булып
Йылҡы ла түлләп киткән ти.
70.Уны тар-мар итһәң дә,
Күленән ил мандымаҫ.
71. Бейек тауға менгәндә
Ирәмәлләп торған ти.
72. Бөтөрәлер һыу көҫәгән уйҙарҙы.
73. Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ.

Уйындар.

1. Алдан уҡ бер шиғыр яҙып эленә. Уны уҡыусылар ятлап алырға тейеш. Шиғырҙың һәр һүҙе айырым яҙылып, ырыуҙарҙағы балаларға таратып бирелә. Шиғырҙың юл башындағы һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙыла. Команда булғас та балалар шиғыр юлына ҡарап үҙ урындарына баҫырға тейеш.

Мәҡәлдәр менән дә ошондай уҡ уйын-ярыш үткәрергә. Ул саҡта инде һәр ырыуға кәмендә етешәр мәҡәл яҙырға кәрәк. Һәр хәлдә һәр балаға бер һүҙҙән таратырлыҡ булһын.

2. Алфавит уйыны. Ырыу ике төркөмгә бүленә. Команда булғас та исемдәренең баш хәрефтәренә ҡарап алфавит төҙөйҙәр. Ҡайһы команда алда – шул еңеүсе.

3. Ишара менән аңлашыу. Бер малай менән бер ҡыҙ йәки ике малай, ике ҡыҙ саҡырыла. Кемдәр саҡырылыуына ҡарап тема бирелә һәм шуны ым-ишара менән күрһәтеү эше йөкмәтелә. Темалар: Киноға саҡырыу – эшем бар, бара алмайым. Мин һине оҡшатам, осрашырға сыҡ – мине уны беләм йәки мин янына сыға алмайым, әсәйем ебәрмәй. Дәресеңде әҙерләнеңме – дәфтәреңде биреп тор әле. Һәм башҡа шундай темаларҙы ырыуҙаштар үҙҙәре тәкдим итә.

4.Туп уйыны. Тупты ырғытыусы берәй баланың исемен әйтә лә һауаға сөйә, ул бала килеп етеп тотоп алырға тейеш. Тота алмаһа, “яза” ала.

5. Турғай. Алып барыусы һыңар аяғында һикерә. Башҡа балалар ҙа һыңар аяҡлап һикерергә тейш. Ул ике аяҡлап һикерһә, башҡалар ҙа ҡабатларға тейеш.Кем яңылыша – уға “яза” бирелә.

6. Математика. Төркөмдөң йәшенә ҡарап миҫалдар ҡабатлау ғәмәлдәре эшләү. Иң бәләкәй төркөмгә, мәҫәлән, ҡабатлау таблицаһынан уйындар. Бер балаға – 7, икенсеһенә - 8, өсөнсөһөнә – 56 һандарын биреп сыға ла, алып барыусы ике һанды сығара һәм, яуабы кем? - Сығып баҫ, - ти. Яуаптар үҙ һандарын йәшереп тота, сыҡҡас ҡына күрһәтә.

7. Ҡапҡа уйыны. Икешәр бала, бер-береһенән ике аҙымдай ара ҡалдырып, етәкләшеп, ҡулдарын күтәреп, ҡапҡа яһап тора. Башҡа балалар сылбыр булып теҙелә. Көй уйнай. Көй ыңғайына балалар бейей-бейей ҡапҡа аша сыға. Көй туҡтаған мәлдә ҡапҡа ике яҡлап дүрт баланы уртала ҡалдырырға тейеш. Дүртәүҙе ҡалдыра алмаһалар, үҙҙәренә “яза”, ҡалдырһалар, улар ҡапҡа булып баҫа.

8. Беҙҙең ишек алдында.
Балаларға бүлеп бирелә:
Әтәс ҡойма башында,
Алтын тараҡ башында.
Йоҡонан тора иртүк,

Ҡысҡыра:
Күмәкләшеп, ҡанаттарын ҡағып-ҡағып: Кикерикүк!” (Бер нисә тапҡыр)
Ҡаҙҙар төшкән йылғаға,
Йәшел үләнле ярға.
Күңелле һөйләшәләр:
Ҡаҙ булып күрһәтәләр, кем нисек теләй – шулай:
Ҡа-ға-ға-ҡа-ға-ға.

Бесәй сумған байлыҡҡа –
Төшкән тәмле ҡаймаҡҡа.
Аҙағы нисек бөтөр?..
Йырлаһа ла: “Мыр ҙа мыр!”

Бутҡа бешергән ҡарға,
Ҡунаҡ саҡырған, ҡара.
Ишетелә тауыштар:
Ҡар-ҡар-ҡар, ҡар-ҡар-ҡар.

Әсәһе менән бергә
Себешкәйҙәр йүгерә.
- Зилә, беҙгә емдәр һип,
Сип-сип-сип, һип-һип-һип!..

Баҡса тулы кәбеҫтә,,
Түтәлдә йөрөй кәзә.
Сыбыҡ күрһәтә Зилә,
Ә кәзә: “Мә-кә-кә, мә-кә-кә!”

Йомортҡа һалған тауыҡ,
Яҡтырып киткән кетәк.
Шуға йөрөй ҡыуанып:
- Ҡыт, ҡытаҡ та, ҡыт-ҡытаҡ!”

Төнө буйы йоҡламай,
Йорт-ҡураларҙы һаҡлай.
Барығыҙ ҙа һап-һау,
Аҡтүш өрә: һау-һау.

**4.** Һорау-шиғырҙар: кемдең кеме бар?
Һыйырҙың – (быҙауы) бар,
Өйрәктең (бәпкәләре).
Аҡбайҙың (көсөктәре),
Турғайҙың – (ҡошсоҡтары).
Аттың (ҡолонсағы) бар,
Һарыҡтың (бәрәстәре),
Ә минең апайымдың
Игеҙәк (бәпестәре).

10. Исемеңде һатып ал. Ҡағыҙға исемдәр яҙыла ла кемгә етте шуға таратыла. Һәр кем үҙ исемен табырға һәм һатып алырға тейеш. Исем хаҡы – башҡорт телендә шиғыр. Исемен һатып алмаған кешенән бер мәрәй алына.

11. Исемдәр йомғағы. Кәмендә унарҙан төркөмдәргә бүленәләр. Төркөмдә беренсе бала исемен әйтә, икенсеһе уның исемен һәм үҙенекен әйтә. Шулай дауам итә. Ҡайһы төркөмдөкөләр яңылышмай, улар – еңеүсе.

12. Аждаһа. Балалар бер-береһенең биленән тотоп, теҙелешә лә аждаһа барлыҡҡа килә. Аждаһаның башы ҡойороғон эләктермәксе була. Балалар ҡулдарын ысҡындырмаҫҡа тейеш.

13. Бурыс башҡарыу. Ботаҡтағы япраҡтарға төрлө эштәр яҙылған. Балалар япраҡтарҙы таратып ала ла барыһы бер юлы уны үтәй башлай.

14. Дауамлы йыр. Береһе туҡтай, икенсеһе дауам итә. Командалар ярышы.

15. Дауамлы бейеү. Командалар ярышы.

16. Светофор. Юл ҡағиҙәләрен өйрәнеү.

17. Уҡ атыу.

18.Теләктәр уйлап сығарыу

Табынығыҙ йәмле булһын,
Ашығыҙ тәмле булһын!
Йөҙөгөҙгә нур бөркөлһөн,
Беләктәргә көс ҡунһын!
Уяныгыҙ, тороғоҙ,
Йылмайығыҙ, көлөгөҙ!

Иртән йылмайып уянһаң,
Матур үтер көнөгөҙ.
Зарядкаға сығайыҡ,
Теҙеләйек, баҫайыҡ!
Киреләйек, һуҙылайыҡ,
Эйеләйек, бөгөләйек,
Һикерәйек, йүгерәйек,
Шулай йоҡо асайыҡ!
Ашаттығыҙ, туйҙырҙығыҙ,
Бигерәк тәмле ашығыҙ:
Күңелегеҙ яҡты һеҙҙең,
Нурлы һеҙҙең йөҙөгөҙ.
Рәхмәт һеҙгә, апайҙар!
Ҡулығыҙға бәрәкәт,
Йәнегеҙгә тынyслыҡ,
Һәр саҡ шулай һау-сәләмәт
Йәшәгеҙ һеҙ бик рәхәт!
Ашағыҙ һеҙ тын ғына
Күренһен тик ым ғына.

IV. “Һыуһылыу менән Заятүләк” (Һыу һибеш) уйыны. Был уйынды лагерҙарҙа “Нептун көнө” тип атайҙар. Беҙ иһә, башҡорт халҡының ошо исемдәге эпосына нигеҙләнеп, балаларға был матур мөхәббәт тарихы тураһында мәғлүмәт биреү маҡсатында уйынды әле тәкдим ителгән сценарий буйынса үткәрергә булдыҡ.

Йылғала һыу инеү мөмкинлегенән йәки бассейн шарттарынан сығып, бер ырыу йәки ике ырыу балалары менән үткәрелә. Заятүләк менән Һыуһылыу һайлап алына. Һыуһылыу итеп сәсе оҙон ҡыҙҙы алабыҙ.

Һыуһылыу һыу буйында сәсен тарап ултыра. Уны Заятүләк һағалай. Яйын тура килтереп, ҡыҙ күрмәгәндә генә толомоноң осонан эләктереп ала. Ҡыҙ инде генә һыуға сумам тиһә, сәсе тартыла. Ҡараһа, бер егет ултыра.

- Ебәр, Ер улы. Мин - Һыу ҡыҙы. Һыуһыҙ йәшәй алмайым.
- Нисә көн, нисә төн ошонда көттөм мин һине. Юҡ, ебәрмәйем.
- Улай булғас, минең менән бар. Мин Һыу батшалығында йәшәйем.
- Юҡ, Һылыу. Мин – Ер улы.Мин Балҡантауһыҙ йәшәй алмайым.
- Улай булғас, мин киттем, Заятүләк.

Заятүләк Һыуһылыуҙың толомон ысҡындырмай. Һыуһылыу һаман Һыуға һөйрәй. Шул саҡ Һыу аҫтынан ҡыҙҙар килеп сығып, Һыуһылыуға ярҙамға ташлана. Ерҙән егеттәр Заятүләкте ҡотҡармаҡсы була. Һыу һибеш башлана. Тейешле ваҡыт үткәс,Заятүләк Һыуһылыуҙы ергә алып сыға. Уларҙың иңдәренә елән һалалар.

*Заятүләк:*

Уң яғымдан терәргә
Һыуһылыуым бар минең.
Һул яғымдан терәргә
Балҡантауым бар минең.
Бөгөндән башлап ҡыҙҙар килен булып егет иленә төшәсәк. Киттек, Һыуһылыу, ти.

*ЮҒАЛҒАН МӘКӘЛДӘР УЙЫНЫ.*

*Яҙып эленгән мәкәлдәр ике өлөшкә бүленеп, ике ҡағыҙ киҫәгенә яҙыла һәм балаларға таратыла. Мәкәлдең беренсе өлөшө ҙур хәрефтән башлап яҙыла ла тыныш билдәһе беренсе өлөштә лә икенсе өлөштә лә ҡуйыла. Уйын барышында кемдәр тиҙерәк табыла – шул еңеүсе һанала. Табышкандар*

*теҙелешеп тора бара. Барыһы биш төркөм иҫәпләнә. Беренсе төркөмгә – биш мәрәй, икенсеһенә – дүрт, өсөнсөһөнә – өс, дүртенсеһенә – ике. Ҡатнашҡандары, әммә табыша алмағандарына – берәр мәрәй. Табышыу өсөн минутлап ваҡыт бүленә.*

*Мәҡәлдәр "табышып", теҙелеп баҫҡандан һуң, мәҡәлде ҡысҡырып уҡый ҙар һәм аңлатма бирәләр. Аңлатма биреү мәрәй бүлгәндә, иҫәпкә алына.*

Ир-егеттең үлгәне – илен дошман алғаны.

Ошолай бүленә: беренсе өлөш Ир егеттең үлгәне –

Икенсе өлөш: - илен дошман алғаны.

<u>Һәр ырыу балаһының ятлап алыу һәм мәғәнәһен аңлау кимәленән сығып мәҡәлдәрҙе һайлап алырға</u>.

Егет булһа, ебеп тормаҫ; ебеп торһа, егет булмаҫ.
Иптәшеңә ҡул һелтәмә, кәрәк булып бер көндө.
Айырылмаҫ дуҫыңа ҡайырылмаҫ һүҙ әйтмә.
Иптәшең менән һыйлаш, дуҫың менән серләш.
Туған – ҡәрҙәш, дуҫ – фекерҙәш.
Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә йән бирер.
Дуҫ көлгәндә, һыналмай; бөлгәндә, һынала.
Ҡара төндә дуҫ булғанды ҡылыс та айыра алмаҫ. (Ҡара төн – иң ауыр ваҡытта)
Атайыңдың дошманы һиңә дуҫ булмаҫ.
Дуҫҡа баш булмайҙар, иш булалар.
Йөрәк боҙған – аш түгел, көнөң боҙған – дуҫ түгел.
Күңел берлеге булғанда, кейем төрлөлөгө һиҙелмәй.
Аҙ ҡайғыны аш баҫа, күп ҡайғыны дуҫ баҫа.
Дуҫлыҡ ашта беленмәй эштә беленә.
Матурҙар матур күренмәй, һөйгән матур күренә.
Кеше һине аңлаһын өсөн, үҙең кешене аңлап өйрән.
Атайыңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.
Күҙе һуҡырҙан ҡурҡма, күңеле һуҡырҙан ҡурҡ.
Гөлөң сәскә атмаһа, ҡояшҡа үпкәләмә.
Яҡшы ғәҙәт әҙәм итер, яман ғәҙәт әрәм итер.
Яҡшы һүҙ – күңел күрке.
Осҡанда, ҡарлуғас уҙыр; һайрағанда, һандуғас уҙыр.
Башҡа бәлә – телдән.
Ауырыуға дауа бар, дәртһеҙгә дауа юҡ.
Билдәһеҙ эштә тәүәккәллек ҡотҡара.
Ир ғәйрәте тауҙы ҡом итә.

Булыр илдең балаһы бер-беренә “батыр” ти; бөлөр илдең балаһы бер-беренә “бахыр” ти.
Ике туған татыу булһа, юҡтан бар яһар; ике туған аҙар булһа, барҙан яҙҙырыр.
Атты сыбыртҡы менән ҡыумайҙар, һоло менән ҡыуалар.
Ил ағаһы булыр ирҙең изге кәңәш булыр юлдашы.
Һөйҙәргән дә тел, көйҙәргән дә тел.
Аш һалҡыны һыуытмаҫ, һүҙ һалҡыны һыуытыр.
Яҡшы әҙәм – илдең ырыҫы, яҡшы һүҙ – йәндең тынысы.
Тар табында сәй эскәнсе, киң табында һыу эс.
Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтеп маташыр.
Эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн.
Тура әйткән туғанына ла ярамаған.
Тел ҡылыс: тейешһеҙ урында – тый, тейешле урында – ҡый.
Үҙ илеңдә хужа булмаһаң, кеше илендә ҡол булырһың.
Дуҫы күпте яу алмай.
Исемең есемеңә тап килһен.
Кейем ең килбәтле булһа, үҙең һиммәтле булырһың.
Ҡурайсының тыны иркен, йыраусының күңеле бай.
Йәй сүпләп йыйһаң, ҡыш услап ашарһың.
Аҫыл егет үҙе үлһә лә даны ҡала тыуған илендә.
Алтындың – заты, яҡшының аты (исеме) юғалмаҫ.
Һыу ҡәҙере шишмә юғалғас беленә.
Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт.

*“Алтын тирмә” уйыны өсөн  һорауҙар:*

Бер мөсәлдә нисә йыл?

Һанап сыҡ. Ун ике йыл. Сысҡан, һыйыр, юлбарыҫ,ҡуян, аждаһа, йылан, йылҡы, ҡуй, маймыл, тауыҡ, эт, сусҡа йылдары. 2015 йыл – ҡуй йылы. Ошонан сығып башҡаларын һанап сығарығыҙ. Йыл тәртибе тап ошолай килә.

Боронғоса ай исемдәре: март – буранай, апрель – алағарай, май – һабанай, июнь – һатай, июль - майяй, август – урағай, сентябрь – һарысай, октябрь – ҡарасай, ноябрь – ҡырпағай, декабрь – аҡъюлай, ғинуар – һыуығай, февраль – шаҡай.

Донъя кимәленә билдәле батырҙарыбыҙҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?

Ниндәй башҡорт киноларын беләһең?

“Тормош һабаҡтары” дәреслегенән ошондай һорауҙар алырға кәрәк.

*Һорауҙар:*

Башҡортса аҙна көндәре.

Дүшәмбе, Шишәмбе, Шаршамбы, Кесаҙна, Йома, Шәмбе, Йәкшәмбе.

Башҡорттарҙың милли аҙыҡтары.

Ҡымыҙ ниндәй һөттән яһала? (Ғәҙәттә ат һөтөнән тип яңлыш әйтәләр)

Халҡыбыҙҙың иң мәшһүр эпосы ниндәй?

Тағы ниндәй эпостар беләһең? (Аҡбуҙат. Ҡуңыр буға. Заятүләк менән Һыуһылыу. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу.)

Ниндәй шифалы үҫемлектәр беләһең? Айыу көпшәһе, аҡ әрем, андыҙ, артыш, арыш, ат ҡуҙғалағы, балтырған, башлы һуған, ер еләге, шалфый, мәтрүшкә әрем, эт муйылы, юл япрағы, ҡайын һәм башҡалар.

Иң күренекле ҡурайсылар? Бөтөн донъяға данлыҡлы ҡумыҙсыларыбыҙ.

Башҡорттар донъя кимәленә ниндәй сәнғәт өлгөһө менән билдәле?

Башҡорт бейеүе тыпырлағы ниндәй тауышҡа оҡшаған?

Шүлгән мәмерйәһе ҡайһы районда?

Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Башҡорт халыҡ ижады. Көләмәстәр. /  Ә. М. Сөләймәнов/ Өфө, 1985.
2. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр уҙенсәлектәре. /Ә. М. Сөләймәнов/ Өфө, 1990.
3. Ғәләүетдинов И.Ғ. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Поиграем вместе, друзья. Уфа, 1995.
4. http://detiturizm.ru/programma-lagerya-j-jl/